# Мәдхинур аманаты

Арҙаҡлы сәнғәт оҫтаһы Таңсулпан Бабичеваның «Ватандаш» журналында (2015, №3) баҫылып сыҡҡан «Все мы родом из детства» тигән хәтирәләре мине һоҡландырҙы ла, уйландырҙы ла, бер йырыбыҙҙа әйтелгәнсә, «уйландырып ҡына ҡалмай, моңландырҙы» ла. Уйландырғаны һәм моңландырғаны — хәтер ҡөҙрәте. Был изге төшөнсәнең мәғәнәүи асылы, тармаҡтары (халыҡ хәтере, ер-һыу хәтере, ҡан, ҡанбабалар хәтере...) нескәлектәре һәм үҙенсәлектәре тәңгәлендәге күҙаллауҙарым ғүмеремдең төп өлөшөн фольклор әҫәрҙәрен йыйыу һәм өйрәнеүгә, ҡомартҡыларҙы һаҡлауға, уларҙы халыҡтың үҙенә ҡайтарып биреүгә йүнәлдерелгән ынтылыштарыма бәйлелер, моғайын.

Һоҡландырғаны — авторҙың яҙыу оҫталығы, көнкүрештә була торған бихисап хәл-ваҡиғалар араһынан иң мөһимдәрен һайлап алып, уларҙы ваҡламай, ижтимағи тормош, тарихи ваҡиғалар бәйләнешендә күрһәтә белеү һәләте. Миңеңсә, хикәйәләүҙәге бына ошо үҙенсәлек, йәғни заман ваҡиғаларының бөйөк Шәйехзада Бабич тоҡомдары яҙмышы аша сағылдырылыуы, хәтирәләрҙе уҡымлы итә, улай ғына ла түгел, тарихи хәтерҙе яңыртыуға этәргес бирә. Тарихыңды, тамырҙарҙы белеү, ҡанбабаларҙың хәтер ебен өҙмәү, өҙөлгән осраҡтарҙа тергеҙеү хәстәрлеген күреп, уны ялғап ебәреү бурысы зыялы, зиһенле ата-бабаларыбыҙҙың аңында яҙылмаған ҡанундар рәүешендә һаҡланған бит. Халыҡ ижадында тергеҙелеү, күсәгилешлек күренештәрендәге тотороҡлоҡтоң мөһим сәбәптәренең береһе ошолор, тип уйлайым.

Шәйехзада Бабич нәҫелдәре даирәһендә лә тарихҡа иғтибарлы һәм ихтирамлы заттар аҙ булмаған. Был хаҡта шағирҙың тормош юлын, ижадын ентекле өйрәнгән күренекле әҙәбиәт белгесе, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев былай тип яҙа: «...башҡорттоң буласаҡ бөйөк шағиры Шәйехзада Бабич <...> арҙаҡлы, затлы нәҫелдән. Һүҙ бында ниндәйҙер байлыҡ йәки аҡһөйәклек тураһында бармай. Бабичтар ғүмер буйы тир түгеп, хәләл эш менән көн күргәндәр, илде-ерҙе ҡурсалап, быуын-быуын хәрби хеҙмәттә булғандар, дошманды ҡыуып яу сапҡандар. Ҡулына ҡылыс тотоп, Ил һаҡлағандары ла, ҡулына ҡәләм алып, Илгә ғилем таратҡандары ла күп булған уларҙың. Нисек кенә ғүмер кисермәһендәр, Бабичтар затлы нәҫелдән, күңелдәрендә һәр саҡ иман нуры, мәғрифәт яҡтылығы балҡып торған, ҡараштарынан миһырбанлыҡ, мөрәүәт бөркөлөп торған затлы нәҫелдән...»[1]

Таңсулпан Бабичева хәтирәләрендә ундайҙарҙың исемдәре лә күрһәтелә. Шуларҙың береһе — унының өләсәһе, үҙенең бөтә ғүмерен тоғро хеҙмәткә, белем

[1] *Бикбаев Р.* Шәйехзада Бабич (1895—1919). Өфө: Китап, 1995. 6-сы бит.

нурын сәсеүгә бағышлаған уҡытыусы-мәғрифәтсе Мәдхинур Хәйрулла ҡыҙы Бабичева (1898—1965). Актрисаның яҙмаларынан күренеүенсә, уҡытыу Мәдхинур Бабичева өсөн ижад итеү менән йәнәшә барған: башҡорт драматургияһының юғары өлгөләрен сәхнәләргә сығарыу; арҙаҡлы әҙиптәр: Мәжит Ғафури, Дауыт Юлтый, Баязит Бикбай, Рәшит Ниғмәти, Ҡадир Даяндар ҡатнашлығы менән әҙәби кисәләр үткәреү һ.б. эштәр. Ҡиләсәктә танылған шағирҙар булып киткән Хәким Ғиләжев, Муса Гәли, Ғилемдар Рамазановтар — Дәүләкән башҡорт педучилищеһында башҡорт телен һәм әҙәбиәтен уҡытҡан Мәдхинур Хәйрулла ҡыҙының уҡыусылары.

Таңсулпан Бабичеваның яҙмалары минең дә хәтеремде яңыртты: Мәдхинур Бабичева минең күптәнге «танышым» булып сыҡты. Үҙен күреп белмәһәм дә, уның Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты аша 1958 йылда СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалы китапханаһына тапшырылған фольклор материалдары менән мин уҙған быуаттың 60—70-се йылдарында уҡ, башҡорт халыҡ мәҡәл һәм әйтемдәрен йыйыу һәм өйрәнеү өҫтөндә эшләгән саҡта, танышҡайным. «Дәүләкән һәм Нуриман райондары фольклоры» тигән исем менән фондта теркәлгән был ҡульяҙма әле Рәсәй фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәгенең ғилми архивында һаҡлана[2]. Материалдар йыйынтыҡ тупланмаһы рәүешендә жанрҙарға бүленеп, «Йыйыусынан» тигән ҡыҫҡа ғына, әммә бик кәрәкле инеш һүҙ менән тәҡдим ителгән. Унда халыҡ ижады материалдарының ҡайһы ауылдарҙа яҙып алыныуы, йыйыусының үҙе хаҡында мәғлүмәт бирелгән.

Зыялыларға хас булғанса, Мәдхинур Бабичева башҡарған бихисап эштәрен атап тормай, ғүмеренең төп йүнәлешен ике һөйләм менән генә билдәләп киткән[3]. Материалдарҙың ҡайҙа, ҡасан, кемдәр ауыҙынан яҙып алынғанлығы күрһәтелеүе яҙмаларҙың әһәмиәтен бермә-бер күтәрә.

Яҙып алынған материалдар М.Бабичева тарафынан дүрт төркөмгә бүлеп бирелгән: 1. Йырҙар. 2. Сеңләүҙәр. 3. Мәҡәлдәр. 4. Йомаҡтар. Ошо уҡ төркөмдәр уҡыусы иғтибарына тәҡдим ителгән әлеге материалдарҙа ла (улар ҡыҫҡартылып бирелде) һаҡланды, тик жанрҙарҙы урынлаштырыу тәртибе генә башҡасараҡ. Башҡорт теленең сафлығын һаҡлау мәсьәләләре мөһим бурыстарҙың береһе булып торған хәҙерге шарттарҙа мәҡәл һәм әйтемдәрҙе алғы планға сығарыуҙы кәрәк тип таптыҡ (улар фольклор әҫәре генә түгел, тел күренеше лә, йәғни ҡулланылыш даирәләре киңерәк).

Мәҡәл-әйтемдәр йыйыусы тарафынан: «бында «Башҡорт халыҡ ижады»ның I томында[4] булмаған мәҡәлдәр генә бирелде» тигән иҫкәрмә менән алфавит тәртибендә (һүҙ башындағы беренсе хәрефтәр буйынса) тәҡдим ителгән. Әле баҫылған китапта алфавит тәртибе ғилми баҫмаларҙа ҡабул ителгән ҡағиҙә буйынса һаҡланылды. М.Бабичева йыйған мәҡәлдәрҙең күбеһе, сығанағын күрһәтеп, «Башҡорт халыҡ ижады» исемле күп томлыҡ баҫма эсендәге мәҡәлдәр һәм әйтемдәр томына[5] индерелгәйне, әммә ул томдар, шул иҫәптән мәҡәлдәр томы ла, сығыу менән таралып бөттө. Халыҡ тормошонда быуаттар буйына яҙылмаған ҡанундар вазифаһын үтәп килгән был ижад төрөнә, асылда, ихтыяж бер ҡасан да

---

[2] Ғилми архив, фонд 3, опись 5, д.211, 113 листов (Артабан ҒА. Ф.3. Оп. 5. Д.211. Л...)
[3] Тулыраҡ мәғлүмәттәрҙе Таңсулпан Бабичеваның яҙмаларынан ҡарағыҙ. («Ватандаш». 2015, №3).
[4] Башҡорт халыҡ ижады/ Төҙ. Әхнәф Харисов. Өфө, 1954.
[5] Башҡорт халыҡ ижады. Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр/ Төҙ., инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авторы — Фәнүзә Нәҙершина. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1980. 472 бит.

кәмемәй, шуға күрә Мәдхинур Бабичева йыйған текстарҙың икенсе йыйынтыҡ эсендә лә донъяға сығарылыуы маҡсатҡа ярашлы булыр.

Материалдар араһында йырҙар бик ҙур урын алып тора. Оҙон көйгә башҡарыла торған бер нисә үрнәктән тыш, йыйынтыҡ ҡыҫҡа йыр-таҡмаҡтарҙы үҙ эсенә ала. Йөкмәткеләре буйынса уларҙың күпселеге лирик характерҙағы мөхәббәт һәм көнкүреш йырҙары. Башҡарылыу, әйтелеү вазифалары яғынан улар — түңәрәк уйын, бейеү, мәжлес йырҙары, таҡмаҡтар. Сығыштары яғынан былдай йырҙарҙың («был йырҙарҙың» тип әйтмәйем), бигерәк тә төртмә йыр традицияларының, быуаттар төпкөлөнә барып тоташҡанлығы хаҡында фәнни әҙәбиәттә (О.М.Фрейденберг, М.Элиаде, В.Н.Топоров) ғәйәт ҡыҙыҡлы фекерҙәр әйтелгән. Төртмә, «яманлауға» ҡоролған үрнәктәрҙе, типологик күренеш булараҡ, төрлө халыҡтарҙың фольклорында, төрлө жанрҙар эсендә осратырға була. Йола фольклорында улар айырыуса аныҡ күҙәтелә. Башҡорт туй мәжлестәрендәге ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарҙың бер-береһенә төбәп әйтелгән сакраль мәғәнәле төртмә йыр-таҡмаҡтары шуға миҫал. «Ғәйепләшеү»-маҡташыу тибындағы йырҙар, ҡыҙҙар менән егеттәр әйтештәре уйын фольклорында ла тотороҡло урын алған ижад төрө булды.

Мәдхинур Бабичева тапшырған йырҙар араһында ысынбарлыҡта булмаҫтай хәлдәрҙе комик планда һүрәтләгән шаян йырҙар бар (ҡомған, ҡомғанға башын тыҡҡан Ноғман, арбаҙҙа гармун уйнаған үгеҙ, уға сәбәкәй иткән һыйыр һ.б.)[6]. Улар — уйын-көлкө, күңел асыу ниәтенән билдәле бер шарттарҙа, ғәҙәттә, мәжлестәрҙә, әйтелгән таҡмаҡтар.

Уҡыусыларға ҡулланыу өсөн уңайлыраҡ булһын тигән ниәттән йырҙар тематик төркөмдәргә бүлеп бирелде.

Мәдхинур Бабичева килтергән сеңләү үрнәктәре буйынса, йола фольклорына ҡараған был тармаҡтың материал йыйылған төбәктә айырым саҡҡылары ғына сағылып ҡалғанлығы күренә, әммә уның теркәлеүе, фәнни күҙлектән ҡарағанда, ифрат әһәмиәтле, айырыуса йоланың таралыу арауығын өйрәнгән тикшеренеүселәр өсөн.

Йомаҡтар араһында борондан килгәндәре лә, хәҙерге заманда сыҡҡандары, уҡыусылар араһында ғына ҡулланылғандары ла бар.

Дөйөм алғанда, арымай-талмай балалар уҡытыу, күп һанлы йәмәғәт эштәрен башҡарыу, бер үк ваҡытта халҡының ижад ҡомартҡыларын йыйыу, уларҙы һаҡлау хәстәрлеген күреп, аманат рәүешендә ғилми ойошмаға, тимәк, киләһе быуындарға тапшырған уҡытыусы-мәғрифәтсе Мәдхинур Бабичеваның хеҙмәте баһалауға лайыҡ. Уйлап ҡараһаң, яҙғандарҙың китап булып сығыуы — үҙе үк оло баһа, үҙе үк оло дәрәжә бит. Уҡыусы иғтибарына тәҡдим ителгән был материалдарҙы әҙерләгәндә беҙ нәҡ ошоно күҙ уңында тоттоҡ. Мәдхинур Хәйрулла ҡыҙы йыйған халыҡ ижады әҫәрҙәре халҡыбыҙҙың ижад шишмәһенең ағышын тулыландырыуға булышлыҡ итер, тип ышанабыҙ.

*Фәнүзә НӘҘЕРШИНА,*
*филология фәндәре докторы*

---

[6] Булыуы мөмкин булмаған хәлдәрҙе сағылдырыу алымы шулай уҡ әкиәттәрҙә, фразеологик һүҙбәйләнештәрҙә ҡулланыла («борон-борон заманда, кәзә командир, өйрәк үрәтник булғанда»; «ҡыҙыл ҡар яуғас», «дөйәнең ҡойроғо ергә еткәндә» һ.б.). Ундай йырҙарға, таҡмаҡтарға, тапҡыр һүҙбәйләнештәргә, әкиәт башламдарына ҡарата фәндә «формула невозможного» тигән термин ҡулланыла.

# Дәүләкән һәм Нуриман райондары фольклоры
# Йыйыусынан

*Был йыйынтыҡҡа ингән йырҙарҙы, мәҡәлдәрҙе һәм йомаҡтарҙы мин 1945—1955 йылдарҙа Дәүләкән районының Яңы һәм Иҫке Япар, Ҡаҙанъол, Исмәъил, Шәрип, Көрмәнкәй, Аҡколай, Дүртөйлө, Ҡоръятмаҫ, Ҡыҙрас, Сапай, Буранъол ауылдары һәм Нуриман районының Иҫке Күл, Яңы Күл, Иҫке Бүрес, Яңы Бүрес ауылдарында, күбеһенсә, йәштәр ауыҙынан яҙып алдым.*

*Үҙем Мәдхиә Хәйрулла ҡыҙы Бабичева (1898 йылда тыуғанмын), 42 йыл буйына урта мәктәптә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытып киләм. 1936 йылдан Дәүләкәндә уҡытам — башта башҡорт педучилищеһында, һуңыраҡ (1953 йылдан алып) 3-сө номерлы башҡорт урта мәктәбендә.*

*М.Бабичева*
*5 апрель, 1956 йыл.*

## Мәҡәлдәр

(Бында «Башҡорт халыҡ ижады»ның
I томында булмаған мәҡәлдәр генә бирелде)

1. Атыңды ҡыуа-ҡыуа ултыр, туныңдың итәген ыуа-ыуа ултыр.
2. Атты сабыр алдынан ғына ашатмайҙар.
3. Алмағас алмаһы бешкән һайын эйелер.
4. Арышты һуғып алғас үлсәйҙәр.
5. Ауырлыҡты ир күтәрһә, дәрәжәһен ил күтәрер.
6. Алйот алйотҡа тел-теш тейҙермәҫ.
7. Алдын, дәртле гармун уйнар, алама, эсеп, кәртен уйнар.
8. Алдынғылыҡ — тәхеткә, иремтәллек — ләхеткә.
9. Аҡыллылар — гәпләшеп, тиleләр тешләшеп осрашалар.
10. Аҙ ашҡа ла шөкөр ит, күп ашҡа ла шөкөр ит.
11. Ағылыйға — тағылый.
12. Аҡыл китаптан йыйылыр.
13. Аҡыл бикләнеп йәшәмәҫ.
14. Аҡылһыҙҙы ауыҙлыҡһыҙ ҡалдырмайҙар.
15. Алйот өсөн ике ҡалас — бер тин, ике донъя — бер мөрйә.
16. Аҙ ашаған — күп ашаған, күп ашаған — аҙ ашаған; аҡрын атлаған — шәп атлаған, шәп атлаған — аҡрын атлаған.
17. Аҡылһыҙға ике ҡалас — бер тин, ике етмеш — бер тәңкә булыр.
18. Арт яғына аяғым.
19. Алға ҡараған ас ҡалмаған.
20. Алйот — аҡылы таҡыр, алтын тип, сәсә баҡыр.
21. Алйот эт ауыҙына һары май ҡаптырыр.
22. Алла бүргә [бүрегә]* бәхет бирһә, тешен һындырып бирер.

---

* Бында һәм артабан ҡырлы йәйәләр эсендә бирелгән өҫтәмәләр — минең өҫтәмәләр — Фәнүзә Нәҙершина (***Ф.Н.***)

23. Алыҫтағы әжәл — уйын, яҡындағы — ҡан-йәш.
24. Аҡыллынан ҡурҡҡан ахмаҡты эйәләштерер.
25. Бармаҡтар тигеҙ булмаҫ, ут менән һыу дуҫ булмаҫ.
26. Байҙың дине — мал.
27. Баҫтырығы оҙон булһа, көлтәһе ҡыҫҡа булыр.
28. Батыр ҡулында баҡыр ҙа уҡ башағы.
29. Баҡа — ерҙә, күҙе — күлдә.
30. Балаһыҙ әпсәй [әсәй] ғүмере — һыуыҡ ҡәбер һиллеге.
31. Бәхетһеҙлеккә һылтанған ғүмер бәхет күрмәгән.
32. Беҙ булмаған ерҙә ожмах.
33. Бәхет бураҙнала көтөр.
34. Бәрәңгенән бәрән биҙмәҫ.
35. Балсыҡ таш булмаҫ, бажа туған булмаҫ.
36. Бирһәң бир, бирәһең килмәһә — бейгә бир.
37. Бай һүҙе эт ҡойроғонан төҙ.
38. Берәүҙәр ҡан ҡоя, берәүҙәр байлыҡ йыя.
39. Баҙ ҡаҙыһаң — тәрән ҡаҙы, үҙең һыйырлыҡ булһын.
40. Бармаҡҡа бармағын ҡаҡмаҫ, ҡармаҡҡа ҡарап торор.
41. Бала йығыла-йығыла дәүегер [үҫер, ҙурайыр. — ***Ф. Н.***].
42. Белеме барҙың ҡәҙере бар.
43. Бирә-бирә бирәнгә һалышҡан.
44. Бейә ҡолонға типһә, биртә типмәҫ.
45. Биргәндең битенә төкөрмәйҙәр.
46. Болонға быҙау кермәһен, игенгә сәпсек төшмәһен, баҙға бесәй үтмәһен.
47. Бесәй тырнаҡтарында һандуғас һайрамаҫ.
48. Бер эштең осона сыҡмайынса маҡтанмайҙар, икенсе эште башламайҙар.
49. Дошманыңды ҡасырһаң да, ҡылысыңды тиреҫкә ҡаҙама.
50. Дегет булма, егет бул.
51. Дошманға һатылғансы, үҙ илеңдә ҡорбан бул.
52. Дошман янында булһа, айҙай балтаң биленңдә булһын.
53. Донъя — сәйран, кеше — каруан.
54. Дөйәнән игеҙ тыуғанда, ҡуйҙан һигеҙ тыуыр.
55. Ғилем эҙләгән байлыҡ эҙләмәй.
56. Ғәрәп теле — ғәрәпкә лазым, үҙ телең — үҙеңдең аҙыҡ [...үҙеңә лазым].
57. Ғилемһеҙ эш ҡылған кеше — юлһыҙ йөрөгән кеше.
58. Ғәйбәт береңә балта тотторор, береңә бысаҡ тотторор.
59. Ғишыҡ тотоу балыҡ тотоу түгел.
60. Егет кеше — арыҫланға тиң кеше.
61. Егет ҡылысһыҙ ҙа шәп.
62. Ен зәхмәте теймәҫ, егет зәхмәте тейер.
63. Ҙур арбаға кәзә екмәйҙәр.
64. Илсегә үлем юҡ, ялҡауға белен юҡ.
65. Иш — ише менән, Ишли бисәһе менән.
66. Илдә сәпсек үлмәҫ, йөрәктә йыр шиңмәҫ.
67. Ир ҡанаты ат булыр, ил ҡанаты ир булыр.

68. Иртәнге ашты — кискә, бөгөнгө эште иртәгәһе көнгә ҡалдырмайҙар.
69. Ике кәңәш бер булһа, илле егет йөҙ була.
70. Ил яҙмышы ир ҡулында, ир яҙмышы ил ҡулында.
71. Иҫәр булһа ла — улың булһын, ҡыҙың ситтә булһа ла — иҫән булһын.
72. Иш янына ҡуш — матурлана тормош.
73. Изгелек ҡылып, ыштанһыҙ ҡалма.
74. Ике туған бер ауылда тынмаҫ.
75. Ир бала бәхете далала булыр.
76. Йәй өсөн ҡояш бар, ҡыш өсөн мейес бар.
77. Йоҡо яҫтыҡ теләмәй, халыҡ һуғыш теләмәй.
78. Йыландың тышы йомшаҡ булһа ла, эсе ағыу.
79. Йыуаш булһаң — баҫалар, уҫал булһаң — аҫалар, бер көйө генә йөрөһәң — ил ағаһы яһайҙар.
80. Йәйен — сананы хәтерлә [хәстәрлә], ҡышын — арба әҙерлә.
81. Йыр йылғаһы күмелер, шишмәһе сығып ятмаһа, алтын һүҙ ҙә аш булмаҫ, яҡшы ерҙә ятмаһа.
82. Йыландың ҡойроғон киҫһәң, еҙнәй тип әйтер.
83. Йәшәү — илгә хеҙмәт итеү.
84. Ҡешенекен теләгән — үҙенекенән яҙған.
85. Ҡәзә һөтө сәйгә ярай, кесерткән ашҡа ярай.
86. Ҡиленгә үгеҙ үлһә — ит, арба ватылһа — утын.
87. Ҡиҫкән телем кире йәбешмәй. [Варианты: Бер киҫкән икмәк кире йәбешмәй. — ***Ф.Н.***]
88. Ҡүңелгә һыу һибеп булмай, йондоҙҙарҙы тотоп булмай.
89. Ҡәңәшле эш тарҡалмаҫ, ысын дуҫлыҡ ҡаҡшамаҫ.
90. Ҡөслөнөң тыны ла тирмән тартыр.
91. Ҡәрәк нәмә — сүп түгел, иргә балта — сүп түгел.
92. Ҡүрелгән — ишетелгәнгә иш булмаҫ.
93. Ҡәкре аяҡты турайтып булмай.
94. Ҡүл ҡорор, диңгеҙ ҡоромаҫ.
95. Ҡүптәр көлөп күл кискәндә, яңғыҙ, илап, ярҙа ултырып ҡалыр.
96. Ҡүмәк күтәрһә, күлде күсерер.
97. Ҡеше аҡылы — тышау, үҙ аҡылың — бауыр.
98. Ҡолхоз-совхоз — берҙәм йорт, ҡомо алтын, һыуы һөт.
99. Ҡүңеле юҡтың күҙе юҡ.
100. Ҡемдең эш көнө күп, шунын ҡулы мул.
101. Ҡүп егелгән ат ял-ҡойроғон ҡойор.
102. Ҡешегә оҡшамаҫ кешенең кешелә ҡайғыһы булмай.
103. Ҡүбәләктең ҡанаты шәмдән көйөр.
104. Ҡеше ояһында үҫкән баланан изгелек көтмәйҙәр.
105. Ҡат-ҡат һорау — яҡшы билге, ҡат-ҡат эшләү — яман билге.
106. Ҡоро утын дөрләгәндә, сей ярҡалар ҙа яныр.
107. Ҡоҙағыйҙың ҡомғаны — ҡом тығылып торғаны,
Бирнә һорай башлағас, тешен ҡыҫып торғаны.
108. Ҡайғылы ил — буш дала.

109. Ҡайын төбөндә ҡар булмай, ҡайғылы йөрәктә май булмай.
110. Ҡәҙерең барҙа ҡәҙерлән, ҡәҙерең бөткәс ҡәберлән.
111. Ҡырын кеше ҡырҡ ҡарарға килер.
112. Мәскәүгә юлыҡҡан — туғандарын тапҡан.
113. Мулла өйөнән аш сыҡмаҫ, мәйет күҙенән йәш сыҡмаҫ.
114. Майлы ит тамаҡҡа ултырмай.
115. Мир төкөрһә, күл була.
116. Минең туғаным — минең ҡара ҡаҙаным.
117. Маҡтаныу — һаташыу.
118. Мал — туйған ерен, ир тыуған илен онотмаҫ.
119. Насар һыйыр көтөүлекте бысрата.
120. Нәҫеллек — ағас тамыры.
121. Март — һыулы, апрель — быулы.
122. Малың ҡайтһа, бәрәкәт бар, ҡыҙың ҡайтһа, йәрәхәт бар.
123. Мөхәббәт — дары, һаҡһыҙ ҡыланһаң, шартлай.
124. Өфө — Башҡортостандың төҫө.
125. Сыҡмаған ҡояшҡа ҡыҙынған.
126. Саңһыҙ ваҡытта саң ҡаҡмайҙар.
127. Салауат — эше аҡ.
128. Сабырлы — солтан, сабырһыҙ — шайтан.
129. Сыбыҡты осонан һөйрәмәйҙәр.
130. Сеңләмәгән — аҡ ҡарға, йырламаған — ҡара ҡарға.
131. Сүмәләгә — түбәләй.
132. Сит ерҙә батша булып үлгәнсе, үҙ илеңдә хәйерсе булып үл.
133. Ололар барҙа телең тый, оҫталар барҙа ҡулың тый.
134. Сабыйҙың күҙ йәше төшөр, ҡарттың ҡарғышы төшөр.
135. Себен балды башлап тәмләр.
136. Рәсәй әсәй булыр.
137. Сентябрҙә кем дә бер булыр, март еткәс — шарт тыуыр.
138. Тыуған илең — тыуған әсәң [инәң. — ***Ф.Н.***].
139. Туйға барһаң, туйып бар, ҡуйыныңа күмәс тығып бар, ата ҡаҙыңды һуйып бар.
140. Түшәгеңде үлсә лә аяғыңды һуҙ.
141. Тау башы томанһыҙ, кеше башы хыялһыҙ булмаҫ.
142. Тамсыларҙан — тулҡындар, тулҡындарҙан — даръялар.
143. Таҙ хәйләһеҙ булмаҫ, кеше дуҫ-ишһеҙ булмаҫ.
144. Тигендең шурпаһы татымай. [Буштан килгән әйберҙең файҙаһы булмай, тигән мәғәнәлә. — ***Ф.Н.***]
145. Тура һүҙ әсе булыр, ахыры — яҡшы булыр.
146. Тауҙы тәкә һөҙөп ауҙармаҫ.
147. Теләнсенең бите ҡара, ҡуйыны тулы.
148. Тел иҫән булһа, халыҡ һау булыр.
149. Тәртип ваҡытты һаҡлай.
150. Туры әйткәнгә — туры бейә.
151. Тотолмаған бур биҙән [бейҙән] дә төҙ булыр.

152. Туй — ғәләмәт уй.
153. Тыуған илдән айырылыу — аҡылдан ҡайырылыу.
154. Тел бисҫтәһенә кәртә юҡ.
155. Тауыҡ һәр ваҡыт туҡ.
156. Таң алдынан һүнгән йондоҙ кисен тағы ла ҡабына.
157. Ун тин сыҡмайынса, егерме тин кермәй.
158. Үҙ һүҙенде һүҙ иткәндә дар ағасы ла ҡыуаҡ.
159. Уҫал булғанды аҫалар, йыуаш булғанды баҫалар.
160. Уйҙың төбө юҡ, йырҙың йыртығы юҡ.
161. Үҙ һүҙенән ваз кискән, үлем менән килешкән.
162. Уҡыу һөйһәң, кеше булырһың.
163. Урман үҫтергән аслыҡ күрмәҫ.
164. Ун һум аҡсаң булғансы, ун әхирәтең булһын.
165. Ун ат аҫырағансы, бер һимеҙ һыйыр аҫыра.
166. Үҙеңдеке әйтһә — үлтерә, яттар әйтһә — көлдөрә.
167. Үгәйҙең үте һытылһын.
168. Үҙ-үҙеңде маҡтама, халыҡтан маҡтал.
169. Үпкәләгәнгә үпкә кәрәк. [Үпкәсел кешегә үпкә ите ашатыу ырымына бәйле. — ***Ф.Н.***]
170. Үлем бергә йөрөр.
171. Урмандың һәр мөйөшөндә төлкө, һәр мәкәлдә көлкө булмай.
172. Ут үҙ урынын урманда эҙләр.
173. Үҙ ерендә файҙаһыҙ кеше сит ерҙе һөйәр.
174. Һылыуға һоло ҡабығы кейҙерһәң дә, һылыу булып ҡалыр.
175. Хәтәр бар, немец килһә, милость бар, рус килһә.
176. Һыйлаусыһы булмағанда, аҙығында тәм булмай.
177. Һуғышҡа барған, суҡмарын онотоп ҡалдырған.
178. Һыбай егет юл һорашмаҫ.
179. Һаҡау тик тормаҫ, аҡһаҡ ултырмаҫ, һаңғырау ишетер, һуҡыр күрер.
180. Һөттән аҡ, һыуҙан пак (булып һөйләшкән).
181. Һин илде һөйһәң, ил һине һөйәр.
182. Һөнәр — көйәнтә булмаҫ, иңбашты баҫып төшмәҫ.
183. Һөнәрҙең артығы булмаҫ.
184. Һөнәрле ир тегеү тегер, һөнәрле ҡатын етен үҫтерер.
185. Һәр ғилемгә остаз кәрәк.
186. Халыҡ һирәк һөйләр, һөйләһә — дөрөҫ һөйләр.
187. Һаламдан күҫәк күтәрмәйҙәр.
188. Хазина тауҙа, кейек урманда, аҡыллы һүҙ ҡартта, ғилем китапта (булыр).
189. Һуғыш суҡмары һыҙырылып һыланыр.
190. Һоло ашаған аттың тояҡтары һигеҙ булыр.
191. Һаҡал эйәккә сығыр, мәҡәл йөрәктән сығыр.
192. Һай йылғаның балығы ваҡ булыр.
193. Һаташҡан алйот үҙ ҡыҙына йәрәбә һалып уйнар.
194. Һүҙ аш артынан яҡшы.
195. Хеҙмәт йорто — һәр ҡала, аҡыл йорто — Москва.

196. Фекергә яһаҡ һалып булмай, хәтерҙе һатып алып булмай.
197. Һүҙҙе ишһәң, төн булмаҫ.
198. Хәсрәт ҡатын ир башына сир булыр.
199. Халыҡ хәбәре — донъя хәбәре.
200. Ысын дуҫҡа һыу ҙа татлы һый.
201. Эт этлеген итә: тешләмәһә лә, өрә.
202. Ышанысым — туғанға, таянысым — Уралға.
203. Шағир фекере — ҡылдан нескә, шағир теле — бәкенән үткер.
204. Шәкәр тауы вәғәҙә иткән, үҙе Ҡаф тауына киткән.
205. Ысын һүҙ дөрөҫлөккә, яман һүҙ — ялғансыға алып барыр.
206. Шаталаҡ мылтығын маҡтағанда, һунарсы мәргән атырға өйрәтер.
207. Эт үҙ һауытын ялап ҡуймаһа, күңеле булмай.
208. Эт ҡарғышы бүрегә төшмәй.
209. Шәп аттың тояҡ тауышы оҙаҡ яңғырай сабышта,
Хаҡлыҡ менән уйлаһаң, бирелмәҫһең яңылышҡа.
210. Эше булмаған кәртәләге үләндәрҙе ҡараған, тәҙрәләге себендәрҙе һанаған.
211. Эт йомошона ла, ҡош йомошона ла (йөрөгән).
212. Эш кешеһе кәм-хур булмаҫ.
213. Әкрен барған шәп барған, шәп барған арып ҡалған.
214. Юлда эштең ауыры, сыға бейә бауыры.
215. Юғалған дан кире ҡайтмай.
216. Юлда бүре ашамаһа, кәзә сәйәхәт итер.
217. Ялҡынды һеләгәй менән һүндереп булмай.
218. Ялҡау ашы — балыҡ башы.
219. Ямғырлы йәй көҙҙән яман.
220. Ялҡаулыҡ менән эшһеҙлек — фәҡирлек асҡысы.
221. Яңғыҙ ир яу саба алмай, яңғыҙ ат саң ҡуптармай.
222. Ярлы егет намыҫы менән бай.
223. Ярлы үҙенә ил эҙләй, бай файҙа күҙләй.
224. Яман һүҙ йәнгә яфа.
225. Ялан бүреһеҙ булмаҫ, яуҙан ир ҡасып ҡалмаҫ.
226. Яҙғы ашлыҡты һаҙға сәс, көҙгө ашлыҡты көлгә сәс.
227. Ярлының ятыры киң.
228. Яман дандан кәфен ҡаплап ҡотолоп булмай.
229. Яуҙың яҙаһы — яу.
230. Яу ҡупҡанда хыянат көйрәр.
231. Ялған йығылып ҡалыр, тура гел алға барыр.
232. «Яҡшы» тип әйтһәләр, «яман» да тип әйтерҙәр.
233. Яңғыҙ ҡулдан тау сыҡмаҫ.
234. Яңы күнәктәге һыу татлыраҡ була.
235. Яҡш(ы)атыңды яман итмә. [Яҡш(ы)ат — яҡшы исем. — ***Ф.Н.***]

# Йырҙар

(Атамалы, үҙ көйҙәре булған йырҙар)

## Ашҡаҙар

Ашҡаҙарҡай һыуы тәрән һыу,
Туңмайҙыр ҙа ҡыш уртаһында.
Эй, йә рабби ала (алла — ?),
ҡадир мәүлә,
Ҡалдырҙың бит ҡыҙ уртаһында.

Яныҡайым китте һунарҙарға,
Ашҡаҙарҡай буйы шәшкегә.
Шәшкеләргә китеп, вафат булды,
Башҡайҙарым ҡалды йәш кенә.

Ҡылыстарын тотоп ҡулына,
Саквояждар тағып биленә.
Һунарҙарға китеп, вафат булды,
Ҡайта алманы тыуған иленә.

## Сәрмән буйы

Сәрмән буйҙарына ҡайтҡан саҡта,
Тыңларһыңмы, йырҙар йырлаһам?
Күҙҙәреңде тултырып ҡарарһыңмы,
Зәңгәр яулығымды болғаһам?

Сәрмән буйҙарынан шаулап үтте
Мин яратҡан ҡаҙҙар көтөүе.
Һөйгән йәрҙе ауыр оҙатыуы,
Бигерәк ауыр һағынып көтөүе.

Йәмле Сәрмән буйын йәнләндереп,
Аҡ өйрәктәр йөҙә күлендә.
Минең йәшерен һөйгән яҡын дуҫым
Ҡасан ҡайтыр икән иленә?

Сәрмән буйҙарында туғайлыҡта
Матур ҡоштар һайрай тирәктә.
Һиңә булған йәшлек мөхәббәтем
Шиңмәҫ сәскә атты йөрәктә.

Әйҙә, дуҫым, Сәрмән буйҙарына,
Һиңә серле һүҙҙәр һөйләрмен.
Өс көн күрешмәһәм дә һағына инем,
Өс йыл йөрөһәң, нисек түҙермен.

Сәрмән буйҙарында бик күп йөрөнөм,
Ләкин һинһеҙ рәхәт тапманым.
Үҙ ғүмеремдә бик күп йәрҙәр һөйҙөм,
Һинең кеүектәрҙе тапманым.

Сәрмән буйҙарына ҡайтҡан саҡта,
Тыңларһыңмы, йырҙар йырлаһам?
Күҙҙәреңде тултырып ҡарарһыңмы,
Зәңгәр яулығымды болғаһам?

## Төрлө оҙон көйгә йырлана торған исемһеҙ йырҙар

Бейек кенә тауҙың баштарында
Баҡырып та йөрөй бер бәрән,
Әллә генә бәрән, әллә әҙәм,
Бәхеткәйем юҡлығы әрәм.

Арҡаларҙа кәкүк ҡысҡыра,
Туғайҙарға төшә тауышы,
Заманалар ауыр, йылдар оҙаҡ —
Уң биттәргә төшә һарыһы.

Ултырҙым шул кәмәнең түренә,
Ҡараным шул һыуҙың төбөнә,
Һыу төпкәйҙәрендә ҡара юҡ,
Йыр йырламайынса сара юҡ.

Ағиҙелкәйҙәрҙең яры бейек,
Ҡаҙылып ҡына төшкән баҙ кеүек.
Беребеҙ унда йөрөй, беребеҙ — бында,
Айырылышҡан ғына ҡаҙ кеүек.

Бейек тауҙың баштарында
Йәтсә йөрөй һыу тапмай.
Шәкәр генә ҡапмай, бал ҡапмай,
Яңғыҙ башым ғына йәм тапмай.

## Ҡыҫҡа көйгә йырлана торған һалдат йырҙары

Илдәремә ҡайтыр инем,
Окоптарҙа үлмәһәм.
Бомба аҫтарында ҡалып,
Уртаға өҙөлмәһәм.

Ҡара урман эстәрендә
Ҡара айыу аҡыра.
Һалдат мәйете өҫтөндә
Ҡара ҡарға ҡысҡыра (баҡыра).

Ҡазарманың тәҙрәһенән
Мәсет тоноҡ күренә.

Һалдат ҡәберҙәрен күрһәм,
Күңелдәрем һүрелә.

Уҙған йылда беҙҙең йәште
Һалдатҡа йыйнанылар.
Рус-япон һуғышында
Күбеһе юғалдылар.

Суйын сүлмәк ауыҙы тар,
Бешә һалдат аштары.
Ҡоштар осоп етмәҫ ергә
Китә һалдат баштары.

* * *

Ал мылтыҡты, бар фронтҡа,
Илебеҙгә дан китһен.
Дошмандарҙың танауынан
Ҡара ҡаны һиптертһен.

Теҙелеп үҫкән ағастарҙы
Кемдәр әйтер мышар, тип,

Сит илдәрҙә яңғыҙ башың,
Кемдәр әйтер балам, тип.

Уфа-Иҙел уртаһында
Яңғыҙ үҫә аҡ ҡайын.
Фашистарҙы тураҡларға
Китәм мин, дуҫҡайым.

## Һалдат моңдары

*(Рус-япон һуғышында ҡатнашҡан, Нуриман районы «Баһау» исемендәге колхоз члены Кашаф Мөксиновтан 1945 йылда яҙып алынды)*

Һаҡламаһағыҙ ҙа мине:
Ҡамерҙан [камеранан] ҡаса алмам,
Ҡасып булһа, ҡасыр инем,
Бығауҙы вата алмам.

Егерме йыл һалдат булдым,
Күрмәнем шатлыҡтарын.
Һау булығыҙ, туғандарым,
Аҙаҡҡы минуттарым.

## Бейеү таҡмаҡтары, түңәрәк уйын йырҙары

### Әлләр-әли-әлиләү...

Ағиҙелдәр күтәрә алмай
Бер мысҡал тимерҙәрҙе.
Эҙләһәк тә, таба алмабыҙ
Үткән йәш ғүмерҙәрҙе.

Әлләр-әли-әлиләү,
әлләр-әли-әлиләү,
Әлләр-әли, әлләр-әли,
әлләр-әли, әлиләү.

Ағиҙелдәргә төшәйем,
Төшәйем, юғалайым.
Билдәреңә һары ҡайыштар
Булып уралайым.

Әлләр-әли-әлиләү...

## Бейе, ҡыҙым

Бейе, ҡыҙым, баҫ, ҡыҙыҡай,
Бейегәнгә — бер бәрән.
Бейемәгән кешеләргә
Тыуған сабата әрәм.

Баҫ, ҡыҙыҡай, бейе, ҡыҙым,
Бейегәнгә — бер тауыҡ.
Бейемәгән кешеләргә
Тауыҡ та юҡ, черт та юҡ.

Баҫ, баҫ, баҫ әле,
Беҙ ҙә баҫырбыҙ әле.
Өҫтәлдәргә ҡыҙыл йәйеп,
Туйҙар яһарбыҙ әле.

* * *

Ҡулыңда сылбырҙары,
Ҡулыңда сылбырҙары,
Ҡулдарыңда сылбырҙары,
Һин кемдең былбылдары?

Иртән тороп тышҡа сыҡһам,
Ай янында бер йондоҙ.
Күкрәгеңә ҡулын ҡуйып,
Нисек йоҡлайһың яңғыҙ?

Зәңгәр яулыҡ, эре биҙәк,
Яратып ябынамын.
Һин нисектер, дуҫҡайым,
Өҙөлөп һағынамын.

Сәскә инем илдәрҙә,
Сәселдем бит ерҙәргә.
Тағы ла сәскә булыр инем,
Ҡайтһам тыуған илдәргә.

Ҡояш сыға ҡыҙарып
Өфө-Иҙел буйында.
Һинең менән минең дуҫлыҡ
Китһен ғүмер буйына.

Өфөләргә барыусынан
Ҡара ҡайыштар алдыр.
Беҙҙең яҡта йырсылар күп,
Үҙ йырҙарыңды ҡалдыр.

Сәғәт нисә булды икән
Минең һағыныуыма?
Ниҙәр сәбәп булды икән
Беҙҙең айырылыуға?

Стәрлелә бер йылға бар,
Исемдәре Ашҡаҙар.
Мин генәме һөйгән йәрең,
Әллә бармы башҡалар?

Беҙҙең колхоз гүзәлдәре
Зәңгәрҙән кейенәләр.
Көндөҙөн баҫыуҙа эшләп,
Кистәрен һөйөшәләр.

## Шаян йырҙар

Ике үгеҙ гармун уйнай,
Һыйыр сәбәкәй итә.
Ниндәй йырҙар йырлайым һуң,
Һиңә бағышлап, Бикә?

Иртә тороп тышҡа сыҡһам,
Һыйыр һайрай аҙбарҙа.
Тауыҡтарға бесән һалдым,
Тоҙ ялаттым ҡаҙҙарға.

## Сеңләүҙәр

Атаҡайым, өйҙәрендә
Йөрөгәнем бер таҡта.
Бер таҡталарың ҡыҙғанып,
Бирҙең ун биштә саҡта.

Атаҡайым, өйҙәрендә
Ултырғаным ултырғыс.
Ултырғыстарың ҡыҙғанып,
Биреп ҡуйҙың былтыр ҡыш.

Атаҡайым, өйҙәрендә
Көмөш балдаҡ сөйөндә.
Күп тора тип күпһенмәгеҙ,
Күп тормам өйөгөҙҙә.

Атаҡайым, өйҙәрендә
Йөрөгәнем бер кәртә.
Һин бирәсәк бабайҙан
Ғәйрәт сикте күргәс тә.

Ер еләге ҡайҙа бешә?
Ете үлән төбөндә.
Ҡарт кешегә бирҙеләр, тип,
Йоҡламаным төнөндә.

Һикереп төштөм, һыуҙар эстем,
Ниңә төштөм, ник эстем?
Ҡартҡа биререң белмәнем,
Ниңә тыуҙым, ник үҫтем?

Ултырҙым кәмә түренә,
Ҡараным һыу төбөнә.
Атай, мине һыйҙырмағас,
Ятайым һыу төбөнә.

Атаҡайым, өйҙәрендә
Ашағаным — бер әпәй.
Мине шул картҡа бирмәһәң,
Алып бирермен түбәтәй.

Алыҫтарҙан килгән кәмәгә
Бай түрәләр ултырып киләләр.
Дуҫ-иштәрем, инде мин ни эшләйем,
Мине ҡарт кешегә бирәләр?

Бара ғына торғас, бер ултырҙым
Аяҡтарым ғына талғанға.
Ҡысҡырып та йырлап ебәрәмен,
Йөрәккәйем янып барғанға.

Ҡара урмандарҙа ҡалды
Минең аҡ бейәләйем.
Ҡоштар бит ағасҡа һөйәлә,
Мин ҡайҙа һөйәләйем?

Йәйгә сыҡһам, мин йөрөйөм
Йәш үлән өҫтөнән ойоҡсан.
Сығамын да, шул, айға ҡарайым,
Бик һағынып китеп бойоҡһам.

## Туй мәжлесе йырҙарынан

Һин дә килдең туйға, ҡарт,
Мин дә килдем туйға, ҡарт.
Һин дә бирнә кейҙең, ҡарт,
Мин дә бирнә кейҙем, ҡарт,
Күлдәгеңдең алдын артҡа кейҙең, ҡарт.

Муйыл күҙем, ҡара күҙем,
Ҡарасы күҙҙәремә.
Ҡараһаң һин күҙҙәремә [Ҡараһаң күҙемә генә. — ***Ф.Н.***],
Булам үҙеңә генә.